Сая рухлы, ижади ҡарашлы йәштәр араһында “Аҡйондоҙ һәм Аҡйегет” бәйгеһе аҙна башында Сыңғыҙ ауылында үтте. Сыңғыҙҙа үткән бәйгелә Сыңғыҙ, Буранбай, Таулыҡай, Беренсе Этҡол, Мерәç, Ҡолсора ауылдарының Аҡйондоҙҙары һәм Аҡйегеттәре ҡатнашты. Был көндө Сыңғыҙ мәҙәниәт йорто сәхнәһендә ысын мәғәнәһендә йәшлек, саялыҡ, илаһилыҡ, сафлыҡ, мөхәббәт тантана итте. Йәштәр бер-береһенә ғашиҡ йәрҙәрҙе – мөхәббәт образдарын сағылдырҙы, күңелдәргә үтеп инерлек итеп Мостай Кәрим шиғырҙарын һөйләне, тамашасыларҙы һоҡландырып вальста өйөрөлдө. Беҙҙен мәктәп уҡыусылары  Сәғитова Гөлнәзирә һәм Сәлихов Ғәлләм был төбәк бәйгеһендә  сығыш яһап, өсөнсө  урынды яуланы. Уларҙы был е\еүҙәре менән ихлас күнелдән ҡотлайбыҙ!













